# ЭТИМОЛОГ ПРОФЕССОР, ДОКТОР ТУНЖЕР ГУЛЕНСОЙ

*Firdevs XİSAMİTDİNOVA*[*]

*Gölnaz YAGAFAROVA*[**]

**Аннотация**

Мәҡәләлә күренекле төркиәтсе-ғалим Тунжер Гуленсойҙың төрки телдәренең этимологияһы өлкәһенә бағышланған эшмәкәрлеге ҡарала, этимология фәненең үҫешендә уның роле баһалана.

**Терәк Һүҙҙәр:** Төрки телдәре, Этимология, Тунжер Гуленсой, Этимологик һүҙлек.

## BİR ETİMOLOG OLARAK PROF. DR. TUNCER GÜLENSOY

**Özet**

Bu makalede tanınmış Türkolog Tuncer Gülensoy'un Türk lehçelerinin köken bilimi ile ilgili çalışmaları ele alınmakta, âlimin etimoloji biliminin oluşumundaki rolü değerlendirilmektedir.

**Anahtar Sözcükler:** Türk Lehçeleri, Etimoloji, Tuncer Gülensoy, Etimoloji Sözlük.

## PROF. DR. TUNCER GULENSOY AS AN ETYMOLOGIST

**Abstract**

In this article dedicated to the prominent Turkologist, researcher of the Turkic languages Tuncer Gulensoy, his activity in the field of the etymological analysis of the Turkic vocabulary is considered, his role in the formation of etymological science is traced.

**Key Words:** Turkic Languages, Etymology, Tuncer Gulensoy, Etymological Dictionary.

Тунжер Гуленсой – төрки телдәре донъяһында танылған шәхес. Тел ғилемдәренең ҡайһыһын ғына алып ҡарама, уның хеҙмәттәрендә был өлкәләр берҙәй ентеклелек, ихласлылыҡ менән байҡалған, тикшерелгән. Беҙгә айырыуса уның этимология өлкәһендәге хеҙмәттәре ҡиммәтле һәм ҡыҙыҡлы.

Ғөмүмән, этимология мәсьәләләренә үҙен тел ғилеме өлкәһендә әҙерлекле тойған кеше генә тотона алалыр ул, сөнки был өлкә тикшеренеүсе алдына үтә лә яуаплы бурыстар ҡуя.

Беренсенән, синхрон кимәлдә телдең лексик байлығын яҡшы белеү. Хатта белеү генә лә етмәй, бөтә нюанс һәм нескәлектәрендә, мәғәнәүи төсмөрҙәренән башлап тарихи

[*] Prof. Dr., Rusya Bilimler Akademisi Ufa Tarih, Dil ve Edebiyat Enstitüsü, Ufa-BAŞKURDİSTAN/RUSYA, el-mek: hisamitdinova@list.ru
ORCİD ID: https://orcid.org/0000-0001-5997-9928
[**] Doç. Dr., Rusya Bilimler Akademisi Ufa Tarih, Dil ve Edebiyat Enstitüsü, Ufa-BAŞKURDİSTAN/RUSYA, el-mek: rishrinat@mail.ru
ORCİD ID: https://orcid.org/0000-0003-4363-2940

ҡатламдарына тиклем ентекләп айырыу талап итələ. Тунжер Гуленсой иһә фәнни тикшеренеүҙәрендә әҙәби телдең йыйылған, апробация үткән, тейешенсә өйрәнелеп, һығымталар яһалған базаһы менән сикләнмәй (әҙәби тел материалын грамматик йәһәттән төркөмләп, төрөк теленең грамматикаһы дәреслектәрен әҙерләй ул 1985-1986, 1992, 1994 йылдарҙа). Уның хеҙмәттәренең тос өлөшөн төрки телдәренең, айырыуса төрөк теленең һөйләш һәм диалекттары мәсьәләләре алып тора. Ғалимдың ғилми эшмәкәрлеге менән яҡындан таныш булмаған кеше лә, уның нәшер ителгән хеҙмәттәренә ҡарап, Т. Гуленсойҙың ерле һөйләш материалдарына ни тиклем ҙур баһа һәм әһәмиәт биреүен тоҫмаллай ала. Ысынлап та, Анатолия һәм Румели һөйләштәре библиографияһы (1981), Кутахья һөйләштәре (1988), Тунджели һөйләштәре (1992), көнсығыш һәм көньяҡ-көнсығыш Анатолия һөйләштәре (1993), Румели һөйләштәренең фонетикаһы (1993), Элазиг һөйләштәре (1994), төрөк теленең һөйләштәре (2003), Нахчиван һөйләштәре (2014) (Tuncer Gülensoy, 2018) кеүек хеҙмәттәренең исемдәрен дә атап үтеү етә, ғалимдың диалектология өлкәһенә ни тиклем көс сарыф итеүен асыҡ күреп була. Үҙ сиратында, диалектологик мәғлүмәттәр, билдәле булыуынса, – телдең тарихын өйрәнеүселәр өсөн бик мөһим сығанаҡ, сөнки ерле тел материалдары күпселек осраҡта әҙәби телдә теркәлмәгән йәки төшөп ҡалыуға дусар булған тарихи мәғлүмәттәрҙе һаҡлай, улар аша телдең үҫеш этаптары тағы ла тәрәнерәк планда тергеҙелә. Т. Гуленсойҙың этимологик тикшеренеүҙәрендә бындай мәғлүмәттәр төп урындарҙың береһен алып тора: ул төҙөгән ҙур күләмле ике томлы этимологик һүҙлектә һүҙҙәрҙең тамырҙары асыҡланғанда даими рәүештә Анатолия һөйләштәренән сағыштырма материал бирелә бара, шуның менән һүҙҙең ҡулланылыу сиктәре һәм таралышы, шулай уҡ айырым тамырҙарҙың боронғо тамырҙарға бәйләнеше асыҡлана. Мәҫәлән, әҙәби төрөк телендә ҡыпсаҡ телдәренә хас булған *тауыш* һүҙе юҡ, ул тик төрөк һөйләштәрендә шул уҡ мәғәнәлә *tavuş, tauş, tavıştı* формаларында, *tavuş et-* ‘өндәшеү’ ҡылымы составында осрай (Gülensoy, 2011, cilt 2: 872). Бынан сығып, *тауыш* һүҙенең төрөк теленә лә сит булмауы асыҡлана, төрки телдәрен берләштереүсе тағы ла бер дәлил табыла.

Икенсенән, тел тарихсыһынан телдең тарихын, үҫеш этаптарын яҡшы күҙаллай алыу талап ителә. Был йәһәттән дә мотлаҡ телдең тарихын халыҡ тарихына бәйләп, телдең тарихи үҫеш этаптарын өйрәнеү кәрәклеге асыҡ. Тимәк, этимолог телсе булыуҙан бигерәк тел тарихсыһы булырға тейеш. Сөнки ябай математик ысул менән генә теге йәки был һүҙҙең ниндәй тамыр-нигеҙгә барып тоташҡанын аңлап та, аңлатып та булмай. Бының өсөн, кәм тигәндә, ошондай төр һүҙсектәрҙең беренсел сығанаҡтарын барлап, телдең тарихи үҫеш дауамында уларҙың урынын билдәләй белергә кәрәк. Т. Гуленсойҙың османлы теле (1986), төрки тамғалар (1989), иҫке яҙыуҙар һәм османлы теле дәрестәре (1994) буйынса баҫтырылған хеҙмәттәре лә ғалимдың иң тәүҙә тел тарихына бәйле төшөнсәләрен теоретик планда нығытыуын күрһәтә. Артабан иһә Тунжер бей был күҙәтеүҙәрен “Doğu Anadolu Osmanlıcasi: Etimolojik sözlük denemesi” (1986), “Kürtçenin Etimolojik Sözlüğü” (1994), “Türkiye Türkçesindeki Türkçe Sözcüklerin Köken Bilgisi Sözlüğü” (Анкара, 2007, 2011) хеҙмәттәрендә килтереп, тикшеренеүҙәрен һүҙҙәрҙең беренсел тамырҙарын билдәләүгә йүнәлтә. 2011 йылда нәшер ителгән ике томлы этимологик һүҙлектә һәр бер һүҙ тәүге тамырына тиклем алып барып еткерелгән, тикшерелгән, тәүсығанаҡ булған беренсел тамыр аныҡ билдәләнгән (мәҫәлән, *sap* һүҙенең боронғо тамыры *sa* күрһәтелә (Gülensoy, 2011, cilt 2: 732) йәки фараз рәүешендә

икенсе төрлө аңлатма бирелә (мәҫәлән, *тауис* һүҙенең өноҡшатыу һүҙенә барып тоташыуын фаразлай (Gülensoy, 2011, cilt 2: 872).

Өсөнсөнән, этимология өлкәһендәге тикшеренеүҙәр мотлаҡ рәүештә быға аҫа атҡарылған махсус этимологик тикшеренеүҙәргә таянып башҡарыла. Был йәһәттән Тунжер Гуленсойҙың әҫәрҙәрендә авторҙың бик күп танылған этимологтарҙың фекерҙәренән хәбәрҙар булыуын күрәбеҙ. Тәү сиратта, әлбиттә, Төркиәлә нәшер ителгән этимологик хеҙмәттәр нигеҙ булараҡ файҙаланыла. Андреас Титце (Tietze, 2002, cilt 1; Tietze, 2009, cilt 2), Хәсән Эрен (Eren, 1999), Севант Нишаньян (Nişanyan, 2012), Көҙрәт Эмирулы (Emiroğlu, 1989) кеүек телселәрҙең эштәренә таянып эш итә ғалим. Әлбиттә, төрки донъяһында күптән инде өлгөлө тип ҡабул ителгән һәм әһәмиәте бер ваҡытта ла кәмемәгән Дж. Клоссон (Clauson, 1972), А.М. Рясянен (Рясянен, 1969-1971), В.Э. Севортян (Севортян, 1974, 1978, 1980, 1989), В.Г. Егоров (Егоров, 1964), шулай уҡ Г. Рамстедт, У. Йохансон, Г. Дёрфер кеүек ғалимдарҙың хеҙмәттәренә лә нигеҙләнә. Бының менән генә лә туҡталып ҡалмай ғалим, был әҫәрҙәрҙәге кәмселектәрҙе тотоп алып тәнҡитләй, заман яңылыҡтарына һәм яңы тикшеренеүҙәргә нигеҙләнеп төҙәтмәләр индерә, асыҡлап, аныҡлап китә. Мәҫәлән, 2017 йылдың 13-16 ноябрендә Анкара ҡалаһында “Яңы Төркиә стратегик тикшеренеүҙәр үҙәге” тарафынан ойошторолған “Төрки телдәрҙә аралашҡан өлкәләр ҡоролтайы”нда Төркиәлә нәшер ителгән дүрт этимологик һүҙлектә (А. Титце, С. Нишаньян, Х. Эрен, К. Эмирулы) осраған хаталы ҡараштарға бәйле иҫкәрмәләр биреп, ҡайһы бер һүҙҙәрҙең этимологияһына ҡағылышлы үҙенең фекерҙәре менән уртаҡлашты. Ҡатнашыусыларға таратылған күргәҙмә материалдарында ла үрҙә күрһәтелгән дүрт хеҙмәттә байтаҡ һүҙҙәрҙең яңылыш бирелгәнлеген сағылдырған мәғлүмәттәр урын алған, улар хаҡында ентекле мәғлүмәтте ғалимдың ике томлыҡ этимологик һүҙлегендә табып була (мәҫәлән, *tonton* лексемаһы тураһында ҡарағыҙ: (Gülensoy, 2011, cilt 2: 910). Әйткәндәй, үҙ хеҙмәттәрен дә даими камиллаштырыу өҫтөндә эшләй ғалим.

Дүртенсенән, дөйөм ғилми кимәл, эрудиция, зирәклелек, күҙәтеүсәнлек, оҫҡорлоҡ кеүек шәхси сифаттар мөһимлеге мәғлүм. Тунжер бейҙең был кешелек хосусиәттәре уны белгән һәр кемгә таныш, уның менән аралашып ҡына киткәндә лә был сифаттарына хайран ҡалаһың. Оло быуын вәкилдәренә етди, тос уй-фекерҙәрен еткерә, йәш быуын вәкилдәренә дәртләндереү, күтәремләү һүҙҙәре табып, дәртләндереп-ҡеүәтләп ебәрә ул. Шул уҡ ваҡытта олпат, сал сәсле аҡыл эйәһе балаларса ябайлылыҡ, саф күңеле менән арбай әңгәмәсеһен. Шуға күрә лә уға барыһы ла – олоһо ла, кесе лә – тартыла. Шуға күрә лә уның уҡыусылары байтаҡ (уларын да ул яратып-һөйөп: “Был – минең улым (йәғни үҙ уҡыусыһы), был – ейәнем (йәғни уҡыусыһының уҡыусыһы)”, – тип мәрәкәләй. Улдары ла, ейәндәре лә, бүләләре лә уға шундай уҡ һоҡланыу ҡатыш яратыу тойғоһо менән яуап ҡайтаралар). Уҡытыусы-уҡыусы тандемынан бына тигән байтаҡ эш сыҡҡан. Мәҫәлән, Байбарс Гуленсой менән берлектә кейем-һалым һәм биҙәнеүгә бәйле һүҙҙәрҙе теркәгән һүҙлеге был тематик төркөмгә ҡараған лексемаларҙың этимологияһын һәм мәғәнәһен асыҡлай, тотош бер лексик-семантик төркөмгә тарихи-семантик анализ яһай (Gülensoy, 2000). Уның уҡыусылары үҙҙәре инде күптәргә ҡанат ҡуйған, фәндә үҙ урындарын табып, ышаныслы аҙымдар менән атлай. Тунжер бейҙең уҡыусылары Әхмәт Буран, Эржан Алкая мөхәррирлегендә әҙерләнеп баҫтырылған TÜRKLAD журналы ла быға асыҡ миҫал. Быны күреп: “Бына ул фәндә күсәгилешлелек, бына ул ғилемдең яңы сифатта килеүе, яңы баҫҡысҡа күтәрелеүе”, – тип ирекһеҙҙән уйлап ҡуяһың. Ә остаз һаман да шул Остаз

булып ҡала, юл күрһәтә, белмәгәндә, әйтеп ебәрә, төҙәтә, дөрөҫләй, кәңәш бирә, хәҡиҡәтте эҙләргә ярҙам итә... Сөнки ул – Шәхес, киң ҡарашлы Уҡытыусы, хәҡиҡәт өсөн Көрәшсе, тәрән белемле Телсе.

Төрки тел ғилемендә этимологик тикшеренеүҙәр өлкәһендә һуңғы арала бик ҙур үҙгәрештәр һәм алға китеш күҙәтелде. Асылда бер быуат эсендә байтаҡ төрки телдәренең үҙ этимологияһы фәне булдырылды, быны беҙ уларҙың нәшер ителгән этимологик һүҙлектәренән күрә алабыҙ. Дөйөм төрки телдәр өсөн уртаҡ булған “Древнетюркский словарь” (Л., 1969), В.Э. Севортяндың күп томлы һүҙлегенән тыш күпселек төрки телдәрендә этимология буйынса лексикографик хеҙмәттәр нәшер ителде: сыуаш, яҡут, татар, ҡаҙаҡ, тыва, ҡырғыҙ һ.б. телдәрҙә, әлбиттә, төрөк теле буйынса хәҙерге көндә махсус этимологик хеҙмәттәр билдәле. Һәм, әйтергә кәрәк, һәр һүҙлек үҙ теленең тарихи нигеҙҙәрен генә тикшереп ҡалмай, һәр хеҙмәт дөйөм төркиәткә тос өлөшөн индерә. Ә инде Рәсәй фәндәр академияһының Тел ғилеме институты ғалимдары тарафынан әҙерләнгән “Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков” томдары (Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков, 2001, 2006) менән бигерәк тә “Алтай телдәренең этимологик һүҙлеге” (Etymological dictionary of the Altaic languages, 2003), А.В. Дыбоның хеҙмәттәре – төрки телдәренең этимологияһы өсөн баһалап бөтөргөһөҙ сығанаҡ һәм ышанысլы нигеҙ ул. Был мәғлүмәттәргә нигеҙләнеп, һис шикһеҙ, һәр бер төрки теле вәкилдәре үҙ телдәренең этимологияларын тулы рәүештә булдыра ала. Әйтергә кәрәк, замана елдәре этимологияны ла урап үтмәй. Тупланған мәғлүмәттәр махсус электрон базаларға теркәлә бара, информацион арауыҡта, донъя селтәрендә үҙ урынын ала. Мәҫәлән, Рәсәй төркиәтселәре тарафынан “Төрки телдәренең тулы электрон этимологик мәғлүмәттәр базаһы” (Turcet.dbf) әҙерләнә, ул этимологияға бәйле төрлө мәсьәләләрҙе хәл итергә ярҙам итә, атап әйткәндә, семантик реконструкция, һүҙьяһалыш типтарының реконструкцияһы, тәүтел лексемаларының ареалдарын билдәләү кеүек проблемаларҙы асыҡлауға йүнәлтелә. Хатта, проекттың етәкселәре хәбәр итеүенсә, “был базаның нигеҙендә айырым төрки телдәренең этимологик һүҙлектәрен автоматик рәүештә төҙөү мөмкинселеге лә буласаҡ” (http://iling-ran.ru/official/2012-2014_oifn_langlit_report_2013.pdf). Шуны ла һыҙыҡ өҫтөнә алып үтеү мөһим: бындай база төрки телдәре өсөн дә, донъя телдәренең башҡа төркөмдәре өсөн дә әлегә иң беренсе тәжрибә, аналогтары әлегә булдырылмаған.

Һуңғы йылдарҙа башҡорт тел ғилеме өсөн дә был мәсьәлә көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе булараҡ күтәрелде. Рәсәй фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре тарафынан Ф.Ғ. Хисамитдинова мөхәррирлегендә 2011-2018 йылдарҙа нәшер ителгән 10 томлыҡ аңлатмалы-тәржемәүи (әйткәндәй, был һүҙлектә баш һүҙҙәр рус, инглиз һәм төрөк телдәренә ауҙарылып бирелә) һүҙлек проекты тамамланғандан һуң тел ғилеме бүлеге хеҙмәткәрҙәре ошо яңы ҙур проектҡа – башҡорт теленең этимологик һүҙлеген төҙөүгә – тотонорға ҡарар итте. Был тәбиғи ҙә, сөнки икһеҙ-сикһеҙ лексик байлыҡ хазинаһын синхрон планда байҡап сыҡҡандан һуң ошо һүҙ хазинаһының нигеҙҙәрен асыҡлау ихтыяжы ҡағиҙә рәүешендә барлыҡҡа килә. Этимологик, йәғни һүҙҙәрҙең, тимәк, телдең тарихы һүҙлеген төҙөү талабын тулы кимәлдә бойомға ашырыу маҡсатында тәү сиратта төрки телдәр материалында төҙөлгән лексикографик хеҙмәттәр менән танышыу бурысы ҡуйыла. Ошо әҙерлек этабында, әлбиттә, беҙ ҙә Тунжер Гуленсой тарафынан төҙөлөп нәшер ителгән ике томлыҡ этимологик һүҙлегенә мөрәжәғәт иттек, ғалимдың

ҡараштарын өйрәндек, һүҙлектең төҙөлөш принциптарына иғтибар иттек, һәм, иң мөһиме, был хеҙмәт буйынса төрөк тел ғилеменең этимология өлкәһендәге һуңғы ҡаҙаныштары менән таныштыҡ.

Һүҙлеккә килгәндә, уның тәү сиратта үҙенсәлекле ҡоролошо иғтибарҙы йәлеп итә. Билдәле булыуынса, этимологик һүҙлектәр бер нисә төр булырға мөмкин. Берәүҙәре этимологик һүҙлеккә морфологик йәки һүҙьяһалыш анализын ҡарата, икенселәре тамыр һүҙҙәрҙе асыҡлауҙы маҡсат итеп ҡуя, өсөнсөләре тамыр һүҙҙәрҙең тарихын барлауҙы хуп күрә. Был һүҙлектә иһә ошо өс төр һүҙлектең һәммәһе лә сағылыш тапҡан. Һүҙлектә баш һүҙ рәүешендә бирелгән һүҙгә тулы һүҙьяһалыш анализы эшләнә, уның дериваттары бирелә, башҡа төрки телдәренән аналогтар килтерелә, төрөк теленең һөйләштәренән материалдар бирелә, төрлө телселәрҙең был һүҙҙең килеп сығышына бәйле ҡараштары килтерелә, ғалимдың улар менән килешмәгән осраҡтары күрһәтелеп, үҙ фараздары ла урын ала. Ошо рәүешле әҙерләнгән һүҙлек, әлбиттә, төркиәттә лайыҡлы урынын таба.

Шулай итеп, ғалим был һүҙлеге менән төрки телдәренең этимологияһы фәненә тос өлөш индерә, төрки телдәрҙән береһенең вәкиле булараҡ, үҙ телен һәм уның диалекттарын бик тәрән белгән тикшеренеүсе булараҡ, яңы ҡараштар, яңы иҫбатлауҙар менән этимология фәнен байыта, бөгөнгө көндә йәшәп килгән яңылыш фекерҙәргә, хаталы ҡараштарға төҙәтмәләр индерә, фәнгә һәм дөрөҫлөккә хилаф килмәһен тигән төп ғилми ҡанунға тоғро ҡала, шуға хеҙмәт итә. Һәм был юлда үҙ хеҙмәттәренә өҫтәлмәләр, дөрөҫләмәләр индереүҙән дә баш тартмай – ысын ғалим ғына хаталар өҫтөндә эш алып барып, йәмәғәтселек иғтибарына тартынмай тәҡдим итә ала. Шул яғы менән, йәғни ихласлығы, яңылыҡҡа һәр ваҡыт асыҡ булыуы, үҙ хаталарын таный белеүе, башҡалар иғтибарына тәҡдим иткәндә үҙенә генә хас юмор һәм үҙенә йүнәлтелгән ирония менән Тунжер бей айырыуса һоҡландыра, иҫтә ҡала. Фәндең фән булып үҫешеүе, замана менән йәнәш атлай алыуы ошондай шәхестәр арҡаһында барыуы сер түгел. Беҙ ҙә, башҡорт коллегалары һәм уҡыусылары исеменән Тунжер бейҙе яҡынлашып килгән күркәм юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ, киләсәктә Ағиҙелдәй оҙон ғүмер, Урал тауындай ныҡлы һаулыҡ, Ҡош юлындай серле һәм мөғжизәле фән юлында яңынан-яңы сағыу асыштар теләйбеҙ!

**Әҙәбиәт**


CLAUSON, G. (1972). *An Etymological Dictionary of Pre-Thirteen Century Turkish*, Oxford University Press.

DOERFER, G. (1971). Gedanken zur Gestaltung cines idealen Türk-ischen Etymologischen Wörterbuchs. *Orientalistische Literaturzeitung*. LXVI. № 9/10. Sp. 437-454.

EREN, H. (1999). *Türk Dilnin Etimolojik Sözlüğü*. Ankara.

STAROSTIN, S.A., DYBO, A.V., MUDRAK, O. A.. *(with the assistance of I. Gruntov and V. Glumov)* (2003). *An* Etymological Dictionary *of the Altaic languages*. Leiden, Brill, 2003.

GÜLENSOY, B., GÜLENSOY, T. (2000). *Türkiye Giyim-Kuşam ve Süslenme Sözlüğü – etimolojik ve açıklamalı*. İstanbul: Motif vakfı yayınları.

GÜLENSOY, T. (2011). *Türkiye Türkçesindeki Türkçe Sözcüklerin Köken Bilgisi Sözlüğü*. Ankara. 2 cilt.

EMIROĞLU, K. (1989). *Trabzon-Maçka Etimoloji Sözlüğü*. Gülsen ofset.

NIŞANYAN, S. (2012). *Sözlerin Soyağacı Çağdaş Türkçenin Etimolojik Sözlüğü*, Everest Yayıncılık.

TIETZE, A. (2002). *Tarihi ve Etimolojik Türkiye Türkçesi Lugatı* (A-E), İstanbul, Simurg Kitabevi, cilt 1; TIETZE, A. (2009). *Tarihi ve Etimolojik Türkiye Türkçesi Lugatı* (F-J), İstanbul, VÖAW (Avusturya Bilimler Akademisi Yayınları), cilt 2.

TUNCER GÜLENSOY (2018, 4 Mayıs). Erişim adresi: http://www.biyografya.com/biyografi/5362

*Древнетюркский словарь* / Ред. В.М.Наделяев, Д.М.Насилов, Э.Р.Тенишев, А.М.Щербак. – Л.: Наука, 1969. – 676 с.

ДЫБО, А.В. (2013). *Этимологический словарь тюркских языков*. Том 9 (дополнительный): Этимологический словарь базисной лексики тюркских языков. Астана.

ЕГОРОВ, В.Г. (1964). *Этимологический словарь чувашского языка*. Чебоксары.

*Программа фундаментальных исследований* Секции языка и литературы ОИФН РАН «Язык и литература в контексте культурной динамики»: Отчеты по проектам за 2013 год // http://iling-ran.ru/official/2012-2014_oifn_langlit_report_2013.pdf

РЯСЯНЕН, М. (1969-1971). *Versuch eines etymologischen Wörterbuchs der Türksprachen*, Helsinki, t. I-II.

СЕВОРТЯН, Э.В. *Этимологический словарь тюркских языков*. М.: Наука. Т.1 (Общетюркские и межтюркские основы на гласные). 1974. – 767 с.; Т.2 (Общетюркские и межтюркские основы на букву “Б”). 1978. – 349 с.; Т.3 (Общетюркские и межтюркские основы на буквы “В”, “Г” и “Д”). 1980. – 395 с.; Т.4 (Общетюркские и межтюркские основы на буквы “Ж”, “Җ”, “Й”). 1989. – 292 с.

*Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков*. Лексика: 2-е изд., доп. / Авторы: Э.Р.Тенишев, Г.Ф.Благова, И.Г.Добродомов, А.В.Дыбо, И.В.Кормушин, Л.С.Левитская, О.А.Мудрак, К.М.Мусаев; отв.ред. Э.Р.Тенишев. – М.: Наука, 2001. – 822 с.

*Сравнительно-историческая грамматика* тюркских языков. Пратюркский язык-основа. Картина мира пратюрка. М., Наука. 2006. Отв.ред. Тенишев Э.Р.

*Этимологический словарь якутского языка*: Саха тылын этимологичаскай тылдьыта. А-Дь. А-Дь. Часть 1. 1 чааха / Гавриил Васильевич Попов. – Новосибирск: Наука, 2003. – 178 с.